*Гөлсирә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА*

# Тормошто гүзәл итергә теләй Гүзәл



*Гүзәл Яубаҫарова*

Ғәҙәттә, тормошобоҙҙан йәки үҙебеҙҙән ҡәнәғәтһеҙлек тойғоһо кисергән саҡта ”донъя түңәрәк кенә булмай инде ул”, тип йыуанабыҙ. Ә миңә һуңғы осорҙа түп-түңәрәк донъялы кешене осраттым кеүек тойола. Аҡылы менән йөрәге килешеп йәшәгән кешене. Эшенән дә уңған, ғаиләһендә лә бәхетле ҡатынды. Хыялдары менән мөмкинлектәре тап килгән далан-лы эшҡыуарҙы, ниһайәт.

Аңлайым, ожмахта йәшәмәйбеҙ. Моғайын, уның да эсе бошҡан, хаталанған, уңышһыҙлыҡҡа осраған мәлдәре барҙыр. Әммә былар саф һыулы мөлдөр күл йөҙөн божралатып алған ваҡ тулҡындар кеүектер, тип уйлайым.

Ул үҙ-үҙенә тыныс, талапсан, шул уҡ ваҡытта ихтирамлы мөнәсәбәттә. Ана шул тәрән, төплө һәм бер бөтөндө хасил иткән булмышы ары-бире һуғылмаҫҡа, ҡапма-ҡаршы тойғолар айҡашыуында артыҡ көстө исрафламаҫҡа мөмкинлек бирәлер, моғайын. Шул арҡала уның кешеләр һәм донъя менән мөғәмәләһе лә аяҙ, ғәҙел, ябай һәм ихтирамлы. Кәпрәйергә, мин-минлеген ҡабартырға, өҙгөсләнергә лә кәрәк түгел уға. Сөнки был тормошта үҙ урынын тапҡан, теләктәрен ғәмәлгә ашыра белә. Шуға күрә башҡалар алдында үҙ шәхесен раҫлау өсөн уға өҫтәлмә дәлилдәр кәрәкмәй. Шул уҡ ваҡытта ҡаҙаныштарының һәр береһенең нигеҙендә тырышлыҡ, төплө белем, тәбиғи һәләт, ныҡлы ихтыяр һәм көслө фиғел ята.

Юғары профессионаллек, ижади ҡомар, тәрән интеллект һәм ирегеттәргә хас тәүәккәл йүнселлек талап ителгән даирәлә үҙ эшен асып, биш йыл эсендә баш ҡалала ғына түгел, бөтөн республикала абруй ҡаҙанып өлгөргән, күптән түгел генә ”БР-ҙың атҡаҙанған төҙөүсеһе” исеменә лайыҡ булған Гүзәл Яубаҫарова тураһында һүҙем.

”Бәхетте нисек проектларға?” — тип белешкем килде ”АРТ-Проект” яуаплылығы сикләнгән ширҡәттең хужабикәһе менән танышҡандан һуң. ”Маҡсатҡа нисек ирешергә?” — тип һораным.

”Бәләкәйҙән башлы булдым, — тип ябай ғына итеп һөйләй башланы Гүзәл Юныс ҡыҙы. — Был яҡтан атайыма тартҡанмын”.

Юныс Йәмил улы өс йәшендә атайҙан етем ҡалыуына ҡарамаҫтан, зиһенле булыуы арҡаһында был тормошта үҙенә үҙе юл ярған. Ҡы-

ҙылармееu улы ғилем ҡәҙерен төшөнгән кешеләрҙе уҡыуға һәләте менән һоҡландырып, бер йылда икешәр синыф тамамлап, белемгә ынтылған. Атаһының: "Шул тиклем уҡығы килә, ә мәктәпкә йөрөргә кейем юҡ. Нимә эшләргә? Сепрәккә йылы көл һалып алам да ҡар өҫтөнән ялан аяҡ йүгерәм. Һалҡын үҙәккә үткәндә, аяҡ аҫтына көл һалып баҫып торам да, йәнә йүгерәм", — тип һөйләгәнен һаман хәтерләй балалары. Зирәк малай тәүҙә тыуған ауылы Ашҡаҙарҙан 7—8 километрҙа ятҡан Һабырҙа уҡый, унан Темәс педучилищеһында белем ала. Ун ете йәшендә егет мөкиббән бирелеп балалар уҡытырға тотона. Бер йыл үтеүгә булдыҡлы егет Суртан-Үҙән мәктәбенә директор итеп тәғәйенләнә. Мәғариф хеҙмәткәре булараҡ, ул хәрби хеҙмәттән азат ителә. Әммә һуғыш башланыу менән военкоматҡа фронтҡа ебәреүҙәрен һорап мөрәжәғәт итә. 1941 йылдың октябрь урталарында, фашистар Мәскәүгә етеп килгән саҡта уны фронтҡа оҙаталар. Ул Мәскәүҙе обороналау һуғышында автоматчик булып ҡатнаша, ҡаты яралана. Ордендар һәм миҙалдар менән наградланған, ике тапҡыр ҡаты яраланған икенсе группа инвалиды лейтенант Солтанов бары тик 1947 йылда ғына тыуған яғына ҡайта. "Атайым тотош йәрәхәтле ине. Бер снаряд ярсығы башында тороп ҡалғайны, — тип хәтерләй Гүзәл Юныс ҡыҙы. — Врачтар уға бер нисә тапҡыр операция тәҡдим итте, тик һуҡыр булып ҡалыу ихтималын әйткәс, атайым риза булманы. Һуғыш яралары уны ғүмере буйы ғазапланы. Шуға ҡарамаҫтан, ул ифрат асыҡ күңелле, тормоштоң йәмен белгән, кешеләрҙе ятҡан яҡты шәхес булып ҡалды. Атайымдың миңә йоғонтоһо әйтеп бөтөргөһөҙ булды. Ғүмерем буйы уны тыңланым, уның кәңәштәрен тоттом һәм уңдым. Шуға күрә әсәйем йыш ҡына: "Атай һүҙен тотҡан өсөн дә бәхетлеһең", — тип ҡабатлай.

Гүзәл Яубаҫарованың әсәһе Ғәзимә Хәтмулла ҡыҙы ла тырыш һәм ныҡышмалдар нәҫеленән. "Уҡыу өсөн йәнемде бирерҙәй була торғайным. Ҡартатайым: "Урыҫ уҡыуын уҡыма. Нимәгә ул?", тип ҡаршы төшөргә маташһа, ҡасып китә инем, — тип хәтерләй ул. — Аслыҡҡа, яланғаслыҡҡа ҡарамай, көсләшеп уҡыным. Уның байы, шул уҡыуҙың рәхәтен күрҙем", — тип һөйөнә. Юғары белем алғандан һуң юллама буйынса Йылайыр районына уҡытырға килгән Ғәзимә тыуған төбәгендә ҡабаттан ятҡан һөнәренә — балалар тәрбиәләүгә тотонған данлы фронтовик Юныс Йәмил улы менән осраша. Йәштәр бер-береһенә һөйөү һәм тәрән ихтирам нигеҙендә матур ғаилә ҡороп ебәрә. Мәғрифәт һәм кешелеклелек рухы менән һуғарылған татыу ғаиләне тағы ла бәхетлерәк итеп тәүҙә Гүзәл, унан Юнир, шунан кинйәләре Зилә тыуа.

Бәләкәйҙән уҡыуға зирәк Гүзәл Йылайыр районы Ҡашҡар ауылынан 1962 йылда бөгөн Рәми Ғарипов исемен йөрөткән 1-се интернат-мәктәпкә уҡырға килә. Унынсы синыфты алтын миҙалға тамамлай. Һәр йәһәттән һәләтле ҡыҙыҡайға уҡытыусылары төрлө яҙмыш юрай. Шиғыр яҙыу менән мауыҡҡанлыҡтан, әҙәбиәт уҡытыусыһы филология факультетына барырға тәҡдим итә. Ҡайһылары, һинән һәйбәт табип сығыр ине, тип өндәй. Ҡыҫҡаһы, алдында бөтә юлдар ҙа асыҡ. Шул саҡ атаһы: "Төҙөүсе һөнәренә эйә булған кеше ҡайҙа ла, ниндәй генә власта ла юғалып ҡалмай. Һин, ҡыҙым, төҙөүсе бул", — тип кәңәш итә. Шулай итеп ҡыҙыҡай Новочеркасск ҡалаһына, политехник институттың төҙөлөш факультетына юллана.

Институтта ла еңел уҡый. Белгәне менән уртаҡлашырға, һәр саҡ ярҙам ҡулы һуҙырға әҙер торған киң күңелле, алсаҡ ҡыҙҙы һабаҡташтары тиҙ арала үҙ итә. Төрлө милләт вәкилдәре уҡыған юғары уҡыу йортонда Гүзәл тәүге көндәрҙән үҙенең зиһенле икәнен иҫбатлай, гел бишлегә генә уҡый, шул уҡ ваҡытта лабораторияла эшләп тә йөрөй, юғары стипендия ала.

Күркәм холоҡ, тәбиғәт тарафынан мул бирелгән һәләттәр арҡаһында ул ниндәй генә шарттарҙа ла үҙен башҡаларҙан түбән ҡуйыу, үҙ-үҙенә ышанмай, шикләнеп ҡарау кеүек емергес тойғоларҙан азат була. Гүзәл Юныс ҡыҙы үҙе дөрөҫ тип һанағанды теләһә ҡайҙа туп-тура әйтеп бирә ала, бер ниндәй абруй алдында ла ҡаушап, юғалып ҡалмай. Күберәк ир-ат эшләгән һәм ҡатын-ҡыҙҙы бер ни тиклем һанға һуҡмай ҡарау ғәҙәти булған төҙөлөш шарттарында фекер алышыуҙарға, яңылыҡҡа, кәңәшләшеп эшләүгә һәр саҡ асыҡ булыуы, ғәҙеллек, ҡыйыулыҡ кеүек сифаттары уға ғүмере буйы ярҙам итә, әлбиттә.

Уҡыуҙы тамамлағас, уға аспирантураға ҡалырға тәҡдим итәләр. Йәнә һайлау алдына баҫа: теләһәң — Мәскәү, теләһәң — Ленинград, бында ҡалырға ла мөмкин. Шул саҡ йәнә атаһы ярҙамға килә. ”Ҡыҙ кешегә институт еткән, — ти ул. — Ҡайт та тормош иптәше эҙлә. Үҙебеҙҙең халыҡты ҡара”. Гүзәл тағы атаһының һүҙен тота. Юғары уҡыу йортон ҡыҙыл дипломға тамамлаған йәш белгес Өфөгә ҡайта һәм ”Башколхозпроект” институтында эшләй башлай. ”Ул саҡта әле проекттың нимә икәнен дә белмәйем, — тип хәтерләй Гүзәл Юныс ҡыҙы. — Институтта күңелһеҙ һымаҡ. Берәй ергә төҙөлөшкә китергә тип һорап, директорға инәм. Ә ул талапсан хәстәрлек менән: ”Ултыр, эшлә, һинең ҡулыңдан килә”, — тип ҡырт киҫә. Проектлаусы һөнәренең ни тиклем мөһим һәм мауыҡтырғыс булыуы хаҡында һөйләй. Хәҙер йыш ҡына уны, ниндәй һәйбәт кеше булған, тип рәхмәт тойғоһо менән иҫкә алам”.

Ә проект — ул шундай нәмә: кешене өйрәтеп кенә уны төшөндөрөп булмай. Башкөллө бирелеп, һәр бер нескәлегенә тиклем үҙеңә аңларға, үҙ башың менән уйларға кәрәк. Йыл ярым эшләү менән, аҡыллы йәш белгесте төркөм етәксеһе итеп билдәләйҙәр. Ул ваҡытта был бик ҙур вазифа була.

Гүзәлдең ғүмер буйы һынағаны бар: эшләһәң, тырышһаң, иртәме-һуңмы, барыбер күрәләр. Етәкселәргә лә эш рәте белгән, егәрле кешеләр кәрәк бит. Шуға күрә журналистарҙың ”Уңышығыҙҙың сере нимәлә?” тигән һорауына яуабы һәр саҡ бер — ”Тырышырға кәрәк. Тырышһаң була”.

1976 йылда ул Илдар Хөсәйен улы Яубаҫаров менән ғаилә ҡора. Һәр кемдең яҙмышында ҙур әһәмиәткә эйә булған мәленә күскәнгә тиклем ни өсөн Гүзәл Юныс ҡыҙының яҙмышын тәфсилләп бәйән итеүемдең сәбәбен аңлатмаҡсымын. Уның ғүмер юлында бик һирәк осрай торған тотороҡлолоҡ бар. Ғәҙәттә, күптәребеҙ тормош даръяһында тулҡындар ыңғайына сайҡалған юнысҡы кеүек. Яҙмышыбыҙҙы осраҡлыҡтар сылбырына әйләндереп ебәрәбеҙ. Бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙың бәхете яҙмышын кем менән бәйләүенә ҡарай. Ә был мәсьәләлә алдан күрә белеү — ай-һай! Кем менән

уңырыңды, кем менән туңырыңды ҡайҙан беләһең, тип юҡҡа ғына әйтмәй халыҡ.

Бөгөнгө эшендә уңышҡа өлгәшеү өсөн иң кәрәкле һәм уңышҡа сәбәпсе булған сифаттарҙың береһе — дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү һәм шул ҡарар өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә алыу Гүзәл Яубаҫарованың тормош артылыштарының һәр береһендә айырым-асыҡ булып ярылып ята. Етен сәсле, зәңгәр күҙле сибәр башҡорт ҡыҙына сит яҡтарҙа йән атып йөрөүсе егеттәр аҙ булмаған. Ә шулай ҙа ул тыуған яғына ҡайтып, тормош юлдашын үҙ милләтенән һайлауҙы ҡулай күргән. Хистәрҙе аҡыл йүгәнендә тотоуҙың сағыу күрһәткестәренең береһе итеп күрәм быны.

Гүзәлдең институт тамамлап, Өфөлә эшләй башлаған йылы. Һеңлеһе Зиләне 1-се интернат-мәктәпкә урынлаштырыуҙы юллап, ул саҡта директор булып эшләгән Хөсәйен Яубаҫаровҡа инә. Хөсәйен Хәсән улы заманының күренекле шәхестәренең береһе, бик аҡыллы, төплө, талапсан, шул уҡ ваҡытта һәйбәт күңелле һәм эшлекле кеше була торғайны. Миңә лә мәктәп-интернатта ул директор булып эшләгән йылдарҙа уҡыу бәхете тейҙе. Ул беҙҙә йәмғиәт белемдәре дәресен алып бара торғайны. Бик тә олпат, ҙур кеше булып хәтерҙә ҡалған. Бына шул Хөсәйен Хәсән улы элекке уҡыусыһы Гүзәлде иғтибарлы тыңлай, нисек уҡыған, ҡайҙа эшләй, ҡайҙа йәшәй — барыһын да тәфсирләп һораша. Баҡһаң, уның әтнәкәһе булған икән.

”Бер көндө өйҙә кер йыуып йөрөһәм, ишеккә шылтыраталар. Барып асһам, Хөсәйен Хәсәнович тора. ”Башҡорттарҙан дуҫтары аҙ. Бына, танышығыҙ, аралашығыҙ”, — тигән булып, ҡыҙын алып килгән. Дуҫтарым: ”Эй, Гүзәл, бының улы барҙыр инде”, — тип шунда уҡ аңлап алды. Беҙ ҙә иҫәр түгел бит инде, — тип йылмая Гүзәл Юныс ҡыҙы ул саҡтарҙы хәтерләп. — Аралаша башланыҡ, дуҫлашып киттек. Бер көндө Гөлдәр өйҙәренә саҡырҙы. Илдар миңә шунда уҡ оҡшаны”.

Ғәйәт етди, аҡыллы, бик белемле егет менән һылыу, алсаҡ һәм саф ҡыҙ бер-береһен шунда уҡ оҡшата. Береһе ауылда, икенсеһе ҡалала үҫкән булһа ла, тормошҡа, кешеләргә ҡараштары ла оҡшаш булып сыға. Сөнки икеһе лә уҡытыусы, дөрөҫөрәге, мәғрифәтселәр ғаиләһендә тәрбиәләнгәндәр. Яҡты һәм яҡшы тормошҡа бары тик үҙ көсөң, аҡылың һәм ихтыярың менән өлгәшергә була икәненә инанып үҫкәндәр. Хөсәйен Хәсәнович аҙаҡтан, улар матур ғаилә ҡорғас, бер-береһенә лә, ата-әсәләренә лә терәк булып йәшәгәндәрен күреп ҡыуанғас, ғүмере буйы: ”Килендә лә һайлай белергә кәрәк”, — тип ғорурлана. Гүзәлдең атаһы Юныс Йәмил улы иһә Илдарҙы оҡшата: ”Затлы тоҡом, ҡыҙым, сыҡһаң һәйбәт булыр. Уны һайлаһаң, уңырһың”, — тип фатихаһын бирә.

”Тормош юлымда шундай кешене осратҡаныма бәхетлемен. Бер ваҡытта ла үкенмәнем. Яубаҫаровтар тоҡомонда бик ҙур кешеләр, уҡымышлылар күп. Уларҙың шәжәрәһен Салауат Юлаевҡа ла алып барып бәйләйҙәр. Салауат Юлаевтың мәрйә ҡатынынан тыуған малайын Ейәнсураға алып килеп йәшергәндәр һәм Яубаҫаров фамилияһы биргәндәр, тигән фараз бар. Яубаҫар — полководец тигән һүҙ бит. Бик һәйбәт тоҡом — ғәҙелдәр, тоғролар, ғаиләлә лә, кешеләргә

лә бик ихтирамлылар. Бына шул ғаиләгә килен булып төштөм. Бер ваҡытта ла үҙемде уларҙан кәм тойманым, уларға тиң булып керҙем.
— Тиҫтәләрсә йылдар бергә ғүмер иткәндән һуң, хөрмәт һәм ғорурлыҡ менән шулай һөйләй Гүзәл Юныс ҡыҙы һәм былай тип дауам итә:
— Хәҙер мин үҙем әсәй кеше булараҡ, ҡайнымды бик һәйбәт аңлайым. Улыма, ҡыҙыма тип, мин дә яҡшыраҡ кешеләрҙе ҡараштырып йөрөйөм. Улым хәҙер өйләнде инде. Балалар Себерҙә үҫеп, урыҫ һымаҡ булып бөтһәләр ҙә, Айҙарыбыҙ "килен үҙебеҙҙең халыҡтан булһын" тигән теләгебеҙҙе аңланы, ихтирам итте. Әйтеп торһаң, балаларҙың башына барыбер инә ул".

Хәйер, алғараҡ киттек. Йәш ғаиләнең яңы ғына йәшәй башлаған осорона ҡайтайыҡ. Кемгә генә таныш түгел ул саҡтағы ауырлыҡтар.

"Мин бала менән өйҙә ултырам. Илдарҙың бер үҙе эшләп тапҡанын, ни тиклем һуҙырға тырышһаң да, еткереп булмай. Өҫтәүенә, кооператив фатирға ла түләргә кәрәк. Шул саҡ шәл бәйләргә өйрәнеп алдым. Илдарҙың әсәһе — Ейәнсура ҡыҙы. Ә ул яҡтар шәлгә шәп бит инде. Мин бәйләйем, ул сығарып һата. Шулай 25—50 тәңкә аҡса була. Нисек кенә булмаһын, аҙмы-күпме ярҙам". Тап бына шул осорҙа Илдар Хөсәйен улын Себергә эшкә саҡыралар. Йәштәр, артыҡ күп уйлап тормай, тәүәккәлләп сығып китә һәм бер ваҡытта ла үкенмәй.

"Элек Себергә киткән кешеләрҙе: "Оҙон аҡса эҙләп киттеләр", — тип көлә торғайнылар. Ә бит, ысынында, унда бер нимәнән дә ҡурҡмаған, тәүәккәл, үҙ-үҙенә ышанған кешеләр барған. Мәҫәлән, беҙ сығып киткәндә дүрт бүлмәле фатирыбыҙ, үҙебеҙгә күрә йорт-йыһазыбыҙ бар ине. Әммә бер нәмәгә ҡарамай, бәләкәй баланы күтәреп, билдәһеҙлеккә сығып китергә ҡыйыулығыбыҙ етте. Бирешмәнек. Бик яҡшы йәшәнек. Егерме йылға яҡын йәшәгән осорҙа ғаиләбеҙ менән әллә нисәмә тапҡыр сит илдәрҙә ял иттек. Балаларыбыҙҙы етеш шарттарҙа тәрбиәләнек", — тип әйтә ала хәҙер Гүзәл Яубаҫарова.

Халыҡ юҡҡа ғына барлыҡ яраштыра, юҡлыҡ талаштыра, тип әйтмәй. Көн һайын бер телем икмәк өсөн көрәшергә тура килмәһә, муллыҡта йәшәһәң, рухи ихтыяждарҙы ҡайғыртырға ла, балаларға күберәк иғтибар бүлергә лә мөмкинлек була. Әммә сит яҡтарҙа ни тиклем яҡшы булһа ла, улар тыуған ерҙе, Өфөнө һағынып йәшәй. Гүзәлгә, ғөмүмән, ватансылыҡ тойғоһо хас. Һөнәре буйынса технарь булһа ла, ике тиҫтә йылға яҡын ситтә йөрөһә лә, тап-таҙа итеп башҡортса һөйләшеүе менән, халыҡсан, саф теле менән хайран ҡалдыра. Сәнғәткә, әҙәбиәткә лә битараф түгел, Өфөлә башҡортса бер генә тамашаны, спектаклде ҡалдырмай ҡарап барырға тырыша. Тыуған телдән, тыуған моңдан рух күтәренкелеге алып йәшәргә өйрәнгәнгә күрә шулай.

"Урта мәктәпте тамамлағас, улымды Өфөгә уҡырға ҡайтарҙыҡ. Башҡа ергә барһа, уҡыған ерендә ҡалыр, тип уйланыҡ", — тип хәтерләй Гүзәл. Өндәшмәй генә улы эргәһенә ҡайтырға хыяллана әсә кеше. Ә ире икеләнә. Элекке етешһеҙ йәшәү шул тиклем үҙәгенә үткән. Нисәмә йылдарҙан һуң да шуны онота алмай. "Унда ҡайтҡас, ниндәй аҡсаға йәшәрбеҙ?" — тип хәүефләнә. Әммә Айҙар дүртенсе курсты тамамлауға, Гүзәл көсләшеп, тигәндәй ғаиләһен Өфөгә алып ҡайта.

”Ҡайтырға йыйынабыҙ. Бер көндө нишләптер: ”Бер аҙҙан Парижға барып ҡайтырбыҙ, тип әйтеп һалдым”, — тип көлөп хәтерләй ул хәҙер. — Илдарҙың йәне көйә: ”Ниндәй Париж һөйләйһең һин, Өфөлә ашарға икмәгең булһа, бик һәйбәт әле”.

Шуға күрә баш ҡалала төпләнеп, нығынып киткәнсе, Илдар Хөсәйен улы Себерҙән айырылмай, өс йыл буйы йөрөп эшләй. Тәүге йылдарҙа, айырыуса фирманы ойоштороған саҡтарҙа уның тапҡаны ғаиләгә бик ҙур ярҙам була, әлбиттә. Ә Гүзәл уйҙар материалләшә, тигән фекергә ныҡ ышана. Кеше яҡшы уйларға, киләсәгенең матур буласағына инанып йәшәргә тейеш. Ул үҙе ғүмер буйы хыяллана белде. Хәҙер, Аллаға шөкөр, теләһә ҡасан Парижға барып ҡайтырға мөмкинлектәре бар.

Өфөлә ерһеп китеүе бик ауырға төшә Гүзәлгә. Сөнки интернатты тамамлағас, ситтә уҡыған, институттан һуң ике йыл ғына эшләп өлгөргән. Уны бит белгес булараҡ Себерҙә яҡшы беләләр. Ә бында арҡа терәр дуҫтары, ышаныс белдерер таныштары юҡ бәрәбәрендә. Шуға күрә күктән килеп төшкәндәй тоя ул үҙен эшен башлап киткәндә. Берҙән-бер нәмә — теләк.

Иң башта бер эшҡыуарҙың фирмаһына урынлаша. Хужа һаран, аҙ түләй, ә эште күп талап итә. Башҡортостанға ҡайтыр алдынан 1500 доллар хеҙмәт хаҡы алған, иркен йәшәп өйрәнгән кешеләр өсөн 75 долларҙың хәйерсе аҡсаһы кеүек тойолғанын әйтеп тораһы ла юҡ. Етмәһә, тәүге осорҙа артыҡ йонсомайынса йәшәп булыр тип алып ҡайтҡан аҡса дефолтҡа эләгеп юҡҡа сыға. Шундай шарттарҙа, башҡа берәү булһа, төшөнкөлөккә бирелер, аптырап ҡалыр һәм ҡабат Себергә йүнәлер ине. Ә Гүзәл буш урында, бары үҙ көсөнә генә таянып, шәхси эш асырға була.

”Лицензия алырға индем. Мине бер кем белмәй. Рәйсә Ходжаеваға тормошомдо бәйнә-бәйнә һөйләп бирҙем. Ниҙәлер ышанды миңә. Эшләп ҡара, тип бер, ике ҡатлы йорттарҙы проектлау өсөн лицензия бирҙе. Һәм мин бер йыл эсендә нисек эшләй белгәнемде күрһәттем”, — тип хәтерләй Гүзәл Яубаҫарова.

Фирманы асып ебәрә. Әммә теләһә ниндәй эште уңышлы атҡарыр өсөн бәйләнештәр һәм ышаныс кәрәк. Ә Башҡортостанда Гүзәл Яубаҫарова тигән проектлаусыны кем белә? Уның кимәлен, тәжрибәһен, оҫталығын юғары баһалаған кешеләр барыһы ла Себерҙә, ул ғүмер буйы эшләгән сит яҡтарҙа ҡалған. Бына шул саҡта, ышанысты һәм абруйҙы нулдән башларға кәрәк булған һынылыш мәлендә, ҡустыһы Юнир ярҙамға килә.

Юнир Юныс улы Солтанов Өфөлә медицина институтын тамамлағандан һуң, Мәсетле районында баш санитар врачы булып эшләй. Унан ”Ҡарағай” шифаханаһына баш врач итеп тәғәйенләнә. Уның егәрлеге, бөтмөрлөгө, йүнселлеге бында тулыһынса асыла. Шифахананы заман юғарылығына күтәреүгә өлгәшә ул. Хәҙер ”Ҡарағай” Башҡортостандағы иң матур шифаханаларҙың береһе, унда иң абруйлы, иң мыжыҡ, иң талапсан сит ил ҡунаҡтарын да һис тартынмайынса алып барырға мөмкин, тиҙәр ял итеүҙең рәтен-сиратын белгән кешеләр. ”Ҡарағайҙың” уңайлы һәм күркәм булыуында Гүзәл Яубаҫарованың да өлөшө бар. Сөнки апаһының Себерҙә нефтселәр өсөн ниндәй ҡатмарлы проекттар эшләгәнен белгән Юнир тәүге заказсыһы

була һәм уның был ышанысынан икеһе лә, шулай уҡ бында ял иткән һәм киләсәктә ял итәсәк бик күп кешеләр ҙә ота.

Бөгөн юғары кимәлдә эшләргә һәләтле профессионалдар көндән-көн күберәк талап итеплә һәм тейешенсә баһалана башлаған осорға, йәғни Гүзәл Яубасаровалар заманына аяҡ баҫып киләбеҙ. Кемдәр һуң ул профессионалдар? Был һорауға Гүзәл Юныс ҡыҙы миҫалында яуап бирергә мөмкин. Иң тәүҙә, әлбиттә, юғары сифатлы, тәрән теоретик белем һәм уға нигеҙләнгән эшләү ҡеүәһе. Белеме күп тапҡырҙар талапсан, үҙҙәренең белем кимәле тәрән һәм төплө булған уҡытыусыларға тапшырылған имтихандарҙа алған бишле билдәләре менән раҫланған. Унан проект институтында белемен тормош ҡуйған талаптарҙан сығып тәрәнәйткән, тағы ла нығыраҡ махсуслаштырған, эштең энәһенән-ебенә тиклем төпсөрләп өйрәнгән. Унан теоретик белемдәрен, ғилми фараздарын ҡатмарлы һәм һынсыл, хатта аяуһыҙ Себер шарттарында тормошҡа ашырған.

Проектлау — ул бер кешенең генә түгел, тотош коллективтың тырышлығын һәм аңлашып эшләүен талап иткән ҡатмарлы интеллектуаль хеҙмәт. Белгескә яҡшы проектлаусы булып өлгөрөр өсөн кәмендә ун-ун биш йыл ваҡыт кәрәк, тиҙәр был даирәлә хәбәрҙар кешеләр. Ошо арауыҡта ҡабул иткән аҡыллы ҡарарҙар белгестең башында тупланған техник архивҡа — хазина келәтенә әйләнә. Өҫтәүенә, һәр коллектив әйҙәүсе, аңлаусы һәм идеялар биреүсе аҡыллы етәксеһеҙ эшләй алмай. Сөнки тормош проектлаусылар алдында көндән-көн яңы мәсьәләләр ҡуя, төҙөлөштә яңы мөмкинлектәр асыла, яңы материалдар, яңы алымдар уйлап табыла. Гүзәл Юныс ҡыҙы ана шундай талапсан һәм рухландырыусы лидер. Мин бында йыш ҡына "аҡыллы" һүҙен ҡабатлайым. Ә ниндәй мәғәнә һалам һуң уға? Зиһенле кеше башҡаларҙың башы етмәҫлек, ғәйәт ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итә алырға тейеш ул. Шулай уҡ проектлау — гармония, һәр йәһәттән тәртип, теүәллек талап иткән ифрат күп яҡлы эш.

Беҙ, ғәҙәттә, архитекторҙарҙың ғына эшенә иғтибар итәбеҙ, төҙөүселәрҙең генә хеҙмәтен күрәбеҙ. Ә бит ошо һөнәр оҫталарының теләктәре һәм мөмкинлектәре ярашһын, беренселәренең хыял емеше икенселәренең ҡулынан килһен өсөн проектлаусыға байтаҡ баш ватырға тура килә. Сөнки матурлыҡ хаҡында уйлағанда, бында эшләйәсәк, йәшәйәсәк кешеләрҙең һаулығы, уңайлыҡтары төп шарт булырға тейеш, шул уҡ ваҡытта бинаның нық һәм ышаныслы булыуы мотлаҡ. Әгәр ҙә ғалимдар, тикшеренеүселәр аналитик фекер йөрөтөп, яңы идеялар тәҡдим итһә, проект яһаусы уларҙы синтезлап, ысынбарлыҡҡа әйләндерергә тейеш. Бына ни тиклем "тейеш"тәр.

Бөгөнгө көндә Гүзәл Яубаҫарова етәкселек иткән архитектура оҫтаханаһы — "АРТ-Проект" студияһында бына шуларҙың барыһы ла юғары кимәлдә ҡуйылғанын уларҙың ошо биш йыл эсендә яулаған уңыштары раҫлай. "Салют" балалар санаторийын реконструкциялау проекты, С.Кувыкин урамындағы көпләүле баҙарҙы, 144-се гимназияның бассейн һәм спортзалын үҙ эсенә алған төкәтмәне ошо абруйлы предприятие эшләгән. Карл Маркс һәм Чернышевский урамдарының мөйөшөндә төҙөлөп бөтөп барған күркәм бина — Эшҡыуарлыҡ үҙәге проекты иһә "2003 йылдағы иң яҡшы проект" тип табылған һәм

Башҡортостан Республикаһы Архитекторҙар Союзының конкурсында еңеү яулаған. Фирма ”Йәшел сауҡалыҡ” санаторийында дауалау бассейнының, ”Йоматау” санаторийында ял үҙәгенең, сауҙа-экономика колледжының төкәтмәһен проектлаған.

Профессиональлек тигәндә, йәнә бер бик мөһим сифатты әйтмәгәйнем. Ул да булһа, тик профессионалдарға ғына хас тәртип кодексы. Заказсылар менән үҙ-ара мөғәмәләһен ана шул ҡанундарға нигеҙләй Гүзәл Юныс ҡыҙы. Йәғни ниндәй генә шарттарҙа ла фирма үҙенең дәрәжәһенә тап төшөрмәй. Хатта клиент эш барышында алдан килешелгәндәрҙе боҙоп, артыҡ мыжый, һыҡмырлана башлаһа ла, Гүзәл Яубаҫарова алдына алған бурысты еренә еткереп, юғары кимәлдә башҡара. Хатта был фирмаға күпмелер кимәлдә матди юғалтыу килтергәндә лә, выжданды өҫтөнөрәк ҡуя. Был — тормошта иң мөһиме, тип иҫәпләй ул. Шулай уҡ бизнеста ла. Эшендә ошондай аныҡ принциптарға нигеҙләгәндә бер ниндәй махсус реклама ла кәрәкмәй. ”Сөнки ”йүкә телефоны” бик һәйбәт эшләй. Заказсылар береһенән береһе ишетеп, беҙҙе үҙҙәре килеп таба. Эш күләме йылдан-йыл арта бара”, — ти Гүзәл Юныс ҡыҙы ҙур ҡәнәғәтлек менән.

Теүәллекте һәм сифатты ифрат юғары кимәлдә тотоу өсөн күп көс һалған Гүзәл Яубаҫарова үҙендә эшләгән белгестәр менән хаҡлы рәүештә ғорурлана, уларҙы ҡәҙерләй, шул уҡ ваҡытта талапсан булып ҡала белә. Эш кешеһенең күңелен күреү һәм һәр эште хаҡлы баһалау — уның өсөн ифрат мөһим. ”Эштә кешенән түләмәйенсә бер генә һыҙыҡ та һыҙҙыртмайым. Бөтәһе өсөн дә ваҡытында, тейешенсә ризалата барыуҙы выждан эшем итеп күрәм, — ти ул. — Пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм әйткән бит: ”Эшләгән кешегә хеҙмәт хаҡын уның маңлай тире кипкәнсе үк түләргә кәрәк”, — тигән”.

Мохтаждарға ярҙам итергә лә, кәрәгендә спонсор ярҙамы күрһәтергә лә тарһынмай. Шул уҡ ваҡытта кешенән генә өмөт итеп, зарланып ғүмер үткәреүселәрҙе өнәмәй. Ярҙам итергә теләһәң, мохтажға балыҡ түгел, ҡармаҡ бирергә кәрәк, тип иҫәпләй.

Гүзәлдең үҙе өсөн шәмбе, йәкшәмбе юҡ. Проект — ул ижади эш, тинек. Ә ижад кис булды, эш көнө бөттө, тип тормай, баштың тәүлек әйләнәһенә эшләүен талап итә. Ҡайһы бер мәсьәләләргә яуап хатта йоҡлаған ваҡытта ла килергә мөмкин.

Дуҫтары, таныштары Гүзәлдең үҙ уйҙарына мөкиббән бирелеп, эргә-тирәһендә бер нәмәне лә абайламай, уйҙарына мәшғүл булып йөрөүенә лә күнеккән. Уның был сифатына көнләшерлек, әлбиттә. Эшендән йәм табыу, бөтөн булмышың менән бирелеп, мауығып эшләү бәхете һәр кемгә лә эләкмәй ул. Ә яратып, бирелеп эшләгән эшең байлыҡ та килтерә икән, был инде икеләтә ҡыуаныс.

”Ҡайһы бер кеше, нимәгә шул тиклем кәрәк? — тип аптырай. Нимәгә кәрәктер, белмәйем, — ти Гүзәл Яубаҫарова. — Мөмкинлек булған һайын ихтыяж арта. Унан бит йәшәү кимәле тигән нәмә бар. Аҡса ул байлыҡ ҡына түгел, азатлыҡ тойғоһо ла бирә, тормошта үҙеңде ышаныслыраҡ тояһың. Балаларыңа күберәк бирә алаһың”.

Етеш тормошҡа ынтылыш. Бары менән байрам, иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан, тип кенә йәшәргә риза булмау ҙа үҙҙәренә ҡандан уҡ бирелгән, тип иҫәпләй Гүзәл.

"Әсәйемдәр яғы бик бай булған. Хатта уларҙы кулак, тип ауылдан һөргәндәр. Әммә кешелекле, ярҙамсыл булыуҙары арҡаһында, йәлләп, Өфөгә генә ебәргәндәр. Тыуған яҡтары Благоварҙан утыҙ ғына километр ергә. Баш ҡалаға килгәс тә, йүнсел, тырыш булғанлыҡтары арҡаһында, заманына күрә хәлле булып йәшәп алып киткәндәр.

Ҡартатайым өс һуғышта булған. 1914 йылда 17 йәшендә армияға тип сығып киткән, 1921 йылда, инде тере түгелдер, тип өмөт өҙөп бөткәс, ҡайтып ингән. Үҙе кеүек бай ҡыҙын алған. Әлек бит бер-береһенең тоҡомдарын ҡарап өйләнгәндәр. Бик хәлле йәшәгәндәр. "Иртәнге дүрттә тора ла, эште бөтәр өсөн оҙон көн дә етмәйенсә, төнгө 12-лә генә ята инек", — ти торғайны.

Йүнселлек ана шунан киләлер, моғайын. Шулай уҡ кешелеклелек тә. Байлыҡ беҙҙең өсөн төп маҡсат түгел. Иң беренсе сиратта — үҙебеҙҙә эшләгән кешеләрҙе ҡайғыртыу, уларҙың да яҡшы йәшәүҙәрен тәьмин итеү".

Бәхет тураһындағы һорауым, тел осонда ғына торһа ла, бирмәнем. Тик уйланым. Бөтә туғандарын, яҡындарын үҙ эргәһендә туплаған. Тормош юлдашы, улы Айҙар, килене Айгөл, һеңлеһе Зилә бер-береһенә терәк булып, мауығып эшләй. Улы Айҙар — әсәһенең уң ҡулы.

"Башҡорт дәүләт университетының иҡтисад факультетын тамамлағайны. Тәүҙә һалым полицияһында экономист булып эшләне. Шунан мин эшемдә өлгөрә алмай башлағас, эргәмә күсте. Йәштәр бит бик отҡор, компьютерҙы ла яҡшы белә. Әле нефть университетының төҙөлөш факультетын тамамлап килә. Киленебеҙ Айгөл медицина институтында уҡый ине. Әле беҙҙең фирмала эшләп, эшебеҙ менән мауығып китте, нефть университетының төҙөлөш бүлегенә уҡырға инде. Ҡыҙыбыҙ Айгөл Башҡорт дәүләт университетының Хоҡуҡ институтында уҡып йөрөй. Ул киләсәктә үҙ эшен асырға хыяллана".

Балаларының ихтирамына лайыҡ булған һәм үҙе лә уларҙың теләген, ихтыярын, ынтылыштарын хөрмәтләй белгән аҡыллы әсәнең ғорурлығы был. Бына ошондай мөнәсәбәттәргә ҡоролһа ғына, ғаиләлә берҙәмлек була. Ә бизнеста берҙәмлек бик күп нәмәне аңлата, тип раҫлай был өлкәлә эшләгән психологтар. Йыш ҡына бығаса бик татыу һәм берҙәм тойолған ғаиләләр ҙә ҙур аҡсалар, сикһеҙ амбициялар баҫымына бирешә икән. Ә ысын ихтирамға һәм ихлас тойғоларға нигеҙләнгәндәр, киреһенсә, ныҒый. Сөнки ихтыяр, характер, маҡсатҡа, ынтылышҡа ҡушылған муллыҡ һәр кемгә тормошта үҙ урынын табырға мөмкинлек уята. Ә хыялдарҙы ғәмәл итә белә торған кешеләр эргәһендә тупланған был ғаилә тормоштоң гүзәл булыуын теләй һәм уны матурлау өсөн көсөн һис тә йәлләмәй.

*Офис-гараж комплексы проекты*

